1 февраль көнө тарихи-тыуған яҡты өйрәнеү музейында Назар Нәжмиҙең 100 йыллығына арналған «Ғүмер ағыштарын һалдым моңдарға» тип аталған әҙәби-музыкаль композиция булып үтте. Сара барышында шағирҙың тормош юлы һәм ижады тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт бирелде. Салауат педагогия колледжы студенттары «Иҫән ҡалһам», «Бөтәһе лә һуңлап килде миңә…», «Тыуған ил тураһында һүҙ», «Ватан», «Әсәй күҙҙәре» шиғырҙарын уҡып ишеттерҙе.

Назар Нәжмиҙең шиғырҙары йөрәктән сыҡҡан һүҙҙәренең көсө, тәбиғилеге, хистәренең, уй-тойғоларының тәрәнлеге, нәжмисә моңло яңғырауы менән күңелдәрҙе арбай. Заһир Исмағилов, Хөсәйен Әхмәтов, Рим Хәсәнов кеүек күренекле композиторҙарҙың Н. Нәжми һүҙҙәренә яҙған йырҙары йыр-моң һөйөүселәр араһында киң таралған һәм яратып башҡарыла. Кисәлә Роза Мирзаянова («Тауҙар йыры»), «Гөлнәзирә» ансамбле («Мине юлдар саҡыра»), Идрисов Руслан («Өфө юкәләре»), Рәшиҙә Буранғолова («Һиңә тағын мин бер киләм әле») башҡарыуында яңғыраны. Салауат башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Рахмангулов Сибәғәт Ғибәт улы башҡарыуындағы йырҙар тамашасылар күңеленә бигерәк тә хуш килде.

Шағирә Хәзиева Флюра Әсфәндиәр ҡыҙы, Салауат башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Рахмангулов Сибәғәт Ғибәт улы, ҡаланың «Ағинәйҙәр» ойошмаһы рәйесе Буранғолова Рәшиҙә Рәхмәт ҡыҙы үҙҙәренең шағир менән осрашыу хәтирәләре менән бүлеште.

Шағирә Сатучина Фәниә, Сәйфетдинова Флюра үҙҙәренең Н.Нәжмигә арнап яҙған шиғырҙарын уҡынылар.

Н. Нәжмиҙең «Гармунсы дуҫ» пьесаһынан бер өҙөк күрһәтелде.

Ҡаланың тыуған-яҡты өйрәнеү китапханаһы янында ойошторолған «Тәңкәләр» төркөмөнөң сығышы ла тамашасылар күңеленә хуш килде.

Музейҙә үткәрелгән был сара ҡаланың «Ағинәйҙәр» ойошмаһы менән берлектә әҙерләнде.